## **АННОТАЦИЯ к рабочей программе по дисциплине «Родной (башкирский) язык в 5-9 классах**

**Аңлатма яҙыу.**

Был эш программаһы уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11-се кластары өсөн “Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәт” предметы буйынса белем биреү өлгө программаларына (авт.-төҙ.: В.И.Хажин, Ә.Х.Вилданов, Ф.Ә.Аҡҡужина.- Өфө: Китап, 2017.) нигеҙләнеп төҙөлдө.

Программа дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандарттарының положениеларына ярашлы төҙөлгән.

**Туған телдәрҙе өйрәнеү һәм туған телдәрҙә уҡытыуҙың норматив-хоҡуҡи нигеҙҙәре.**

Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 68 статьяһы (п.3) Рәсәй Федерацияһында “…уның бөтә халыҡтарына туған телен һаҡлау, уны өйрәнеүгә һәм үҫтереүгә шарттар тыуҙырыу хоҡуғы” гарантиялай.

Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 54 статьяһы “Башҡортостан Республикаһы үҙ территорияһында йәшәгән халыҡтарға туған телдәрен һаҡларға тиң хоҡуҡтар гарантиялай, уны иркенле өйрәнергә һәм үҫтерергә мөмкинлектәр тыуҙыра”.

Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән №273-ФЗ “Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” Федераль Законының 14 статьяһына (п.1, 4) ярашлы һәр кемгә мәғариф системаһы биргән мөмкинлектәрҙән сығып туған телендә белем алыу хоҡуғы гарантиялана.

“Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” Рәсәй Федерацияһы Законының 9 статьяһына (п.1-5) ярашлы Рәсәй Федрацияһы граждандары тәрбиә һәм белем алыу телен һайлау хоҡуғына эйә.

Ошо уҡ закондың 10 статьяһына ярашлы туған телендә белем алырға теләүселәргә дәүләт һәм мәғариф ойошмалары бөтә шарттар тыуҙырырға бурыслы.

Башҡортостан Республикаһының 2013 йылдың 1 июленән №696-з “Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында”ғы Законының 6 статьяһына (п.3) ярашлы Башҡортостан Республикаһында һәр кем дәүләт аккредитация үткән мәғариф программалары нигеҙендә Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы туған телендә белем алырға хоҡуҡлы. Бының өсөн дәүләт шарттар тыуҙырырға бурыслы.

“Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Башҡортостан Республикаһы Законының 8 статьяһына (п.1-5) ярашлы һәр кем тәрбиә һәм белем алыу телен һайлау хоҡуғына эйә. 9 статьяһында (п.1) дәүләттең туған телдәрҙе өйрәнеү өсөн шарттар тыуҙырыу бурысы билдәләнә.

Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығының 2009 йылдың 6 октябренән №373 бойороғо менән раҫланған Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының 19.3 пунктына ярашлы башланғыс дөйөм белем биреүҙә Рәсәй Федерацияһы субъекттарына дәүләт телдәрен өйрәнеү һәм туған телдәрҙә белем биреүҙе ойоштороу мөмкинлеге бирелә.

Был программа шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы МР Яңауыл районы муниципаль дөйөм белем биреү бюджетлы учреждениеһы Прогресс урта мәктәбенең уҡыу планына, Башҡортостан Республикаһы МР Яңауыл районы муниципаль дөйөм белем биреү бюджетлы учреждениеһы Прогресс урта мәктәбенең эш программаһы тураһындағы положениеһына яраҡлы эшләнде.

## Программа буйынса башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары:

- Туған телен ихтирам иткән, уны рус теле һымаҡ белгән, телгә һәм әҙәбиәткә мәҙәниәттең иң сағыу өлөшө итеп ҡараған, туған телде рус теле менән бер кимәлдә аралашыу сараһы итеп, тел һәм әҙәбиәтте халыҡ аңындағы,йәмғиәттәге мораль-этик нормаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе үҙләштереү ҡоралы итеп аңлаған, рухи яҡтан бай, әхлаҡи яҡтан тоторолоҡло, илһөйәр шәхес тәрбиәләү.

Туған тел һәм әҙәбиәт буйынса туған телдең рус теле менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын билдәләү, лингвистиканың нигеҙ (база) төшөнсәләрен үҙләштереү, тел структураһы, БР халыҡтары телдәре тураһындағы закон билдәләгән кимәлдә белем, күнекмәләр, мәғлүмәт менән тәьмин итеү маҡсатында төҙөлдө.( “Мәғариф тураһында”ғы закон”, 29.12.2012 йыл, Пр № 273-ФЗ;

- уның төҙөлөшө буйынса белемдәрҙе системалаштырыу, тел күренештәрен, факттарын таныу, анализлау, классификациялау, уларға баһа биреү, туған телдә һүҙ байлығын үҫтереү, лексик, фразеологик берәмектәрҙе дөрөҫ файҙалана белеү.
- Уҡыусыларҙың коммуникатив мөмкинлектәрен киңәйтеү, һәләтлектәрен үҫтереү, туған телдең коммуникатив-эстетик мөмкинлектәрен аңлау.
- Туған әҙәбиәттең башҡорт халҡының этномәҙәниәте, тарихы менән, уның рус әҙәбиәте, башҡа әҙәбиәттәр менән тығыҙ бәйләнештә булыуын аңлау. Әҙәби әҫәрҙең телмәр үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу, уҡыусыларҙың ижтимағи, шәхси үҫешен, танып белеү эшмәкәрлеген үҫтерә алыу мөмкинлеген файҙаланыукоммуникатив һәләттәрен камиллаштырыу.
- Уҡыусларҙың интеллектуаль һәм ижади һәләтлектәрен, уларҙың телмәр мәҙәниәтен, туған телдең үҙенсәлектәрен аңлы һәм дөрөҫ ҡуллана алыу мөмкинлектәрен үҫтереү, коммуникатив һәләттәрен камиллаштырыу.
- Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойооошмаларында туған телдә алып барылған берҙән-бер уҡыу предметы булараҡ, йәш быуынды Рәсәй гражданы, уның патриоты итеп тәрбиәләү менән бергә, уларҙың үҙ этник сығышын аңлау, туған халҡыңдың тарихын, телен, рухи мәҙәниәтен үҙенеке итеп ҡабул итеүенә ирешеү.

## Программаға дөйөм характеристика

Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡыған башҡорт балалары өсөн “Башҡорт теле һәм әҙәбиәте” предметы гуманитар белем биреү составына ингән дөйөм филология йүнәлешендәге белем биреүҙең структур өлөшө итеп ҡарала. Шуға ла был курс йөкмәткеһенә ижтимағи күренеш булараҡ башҡорт теле лә, башҡорт теленең структур үҙенсәлектәре лә, башҡорт халҡы тыуҙырған ауыҙ-тел ижады ла, әҙәбиәте лә, башҡорт халҡы йәшәгән мөхит, уның тарихы тураһындағы мәғлүмәттәр ҙә, ғөрөф-ғәҙәттәр ҙә, көнитмеш үҙенсәлеге лә индерелә.

Курстың йөкмәткеһе “Тел” төшөнсәһе йөкмәткеһенә (фонетика, лексика, морфология, синтаксис) ярашлы төҙөлдө. Башҡорт теле факттары даими рәүештә рус теле менән сағыштырылып бирелә.

Уҡыусыларҙың танып белеү әүҙемлеген һәм аңлы үҙләштереүен тәьмин итеү өсөн, башҡорт теле буйынса тарихи белешмәләр ҙә, телдә була торған үҙгәреү, үсеү процестарынан да материал индерелә. Телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен (аудирование, уҡыу, һөйләү, яҙыу) камиллаштырыу өсөн, программа телдән дә, яҙма ла эш төрҙәрен берҙәй кимәлдә билдәләй. Ындай эштәр әҙәби текст өҫтөндә эшләгәндә лә, тел төҙөлөшө буйынса мәғлүмәттәр алғанда ла планлаштырыла.

Тел материалын өйрәнгәндә лә, текст өҫтөндә эшләгәндә лә, күнегеү, һорау, биремдәр уҡыусыларҙың фекер эшмәкәрлеген әүҙемләштереүгә, телмәрен үҫтереүгә, дөйөм белем биреү, үҫтереү күнекмәләрен формалаштырыуға (тыңлау, төп фекерҙе табыу, эҙмә-эҙлелекте билдәләү, үҙенсәлектәрҙе табыу, һорауҙар ҡуя белеү, тәржемә итеү һ.б.), башҡорт әҙәби теле нормаларын үҙләштереүгә йүнәлтелә.

Башҡорт әҙәбиәтенән материал нигеҙҙә календарь планда (миҙгелдәр, даталар) урынлаштырыла. Башҡорт халыҡ ижады, әҙәбиәте өлгөләре менән бергә башҡа милли әҙәбиәттәрҙең дә әҫәрҙәренә программала киң урын бирелә.

Предмет-ара бәйләнеш (метапредмет) талаптарына ярашлы программаға биология, география, математика, тарих, экология мәсьәләләренә ҡағылышлы текстар, эштәр индерелә. Тел, әҙәбиәт һәм мәҙәниәтте берҙәмлектә өйрәнеү, уларҙы башҡорт халҡының үҙенсәлекле менталитетын саҡылдырыусы рухи байлығы итеп ҡарау башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһының төп концепцияһын тәшкил итә. Рус телендә уҡыған башҡорт балаһына туған теле, мәҙәниәте, халҡы тураһында мәғлүмәттәрҙе бирә алыусы, туған телдә аралашырға мөмкинлек биргән, милли ғорурлыҡ тәрбиәләү потенциалы булған берҙән-бер уҡыу предметы булараҡ туған тел һәм әҙәбиәт предметының тәрбәүи мөмкинлектәре ҙур.

Программаға әҙәби текстар һайлағанда, уларҙың туған (башҡорт) әҙәбиәт тураһында дөйөм мәғлүмәт бирә алыу мөмкинлеге, гуманистик йөкмәткеһе, ҡиммәте, уҡыусы шәхесенә ыңғай йоғонто яһай алыуы иҫәпкә алынды. Программаның нигеҙен башҡорт әҙәбиәтендәге билдәле әҫәрҙәр тәшкил итә. Халыҡ менталитетына, тарихына, мәҙәниәтенә ҡағылышлы әҫәрҙәр программала мөһим урын алды. Рәсәй халыҡтары әҙәбиәте өлгөләре лә башҡорт әҙәби әҫәрҙәре йәнәшәһендә бирелде.

Уҡыу өсөн текстар башҡорт халыҡ ижадының сағыу өлгөләренән дә алынды. Әкиәттәр, эпостар, ҡобайырҙар, халыҡ йырҙары текстары, риүәйәттәр, мәҡәлдәр, йомаҡтар һәр класҡа ла индерелде.

Башҡорт художестволы әҙәбиәте өлгөләре менән бер рәттән, халыҡ тарихына, мәҙәниәтенә, шәхестәренә, көнитмешенә ҡараған әҙәби-публицистик текстар ҙа дәреслектәге темаларға ярашлы бирелде. Авторҙар тураһында ҡыҫҡа белешмә өҫтәп бирелде.

Тел материалы, алдараҡ әйтелгәнсә, телдең лингвистик структураһына ярашлы алынды: фонетика, лексика, морфология, синтаксис. Теоретик мәғлүмәт дөйөмләштерелде. Ҡағиҙәләр даими ҡабатланып, иҫкә төшөрөп торорлоҡ итеп бирелде. Башҡорт теленең структур үҙенсәлеге рус теленең аналогик структуралары менән эҙмә-эҙлекле сағыштырылды. Килеш үҙенсәлектәрен сағыштырыу, ике телдәге оҡшаш һәм айырмалы яҡтарҙы табыу, анализлау, тәржемә эштәре килеш системаһына буйынса белемдәрҙе аңлы үҙләштерергә мөмкинлек бирәсәк, методик юлдарҙы күрһәтәсәк. Рус телендә килеш менән үҙгәреүҙең бер нисә тибы бар, берлектә һәм күплектә лә үҙгәреш айырыла; исем, сифат, һан, алмаштың килеш менән ғөмүмән үҙгәрмәүсе һүҙҙәр ҙә байтаҡ. Ә башҡорт телендә иһә килеш формаһы бөтә осраҡта ла стандарт ялғауҙар ҡушыу юлы менән яһала, шул уҡ стандарт ялғауҙар килеш һорауҙарына ла ҡушыла. Килеш исемдәрен һәм һорауҙарын яттан белеү башҡорт телендәге килеш системаһын үҙләштереүҙең нигеҙе булып тора. Шуға күрә программала килеш исемдәрен һәм һорауҙарын ятлатыуға һәр класта ла урын һәм иғтибар бирелә.

Тел материалдарын сағыштырып биреү башҡорт теленең үҙенсәлектәрен үҙләштерергә генә түгел, рус теле материалдарынна ла аңлы ҡараш тыуҙырырыға булышлыҡ итә.

Тел күренештәре башҡорт теленең үҙ материалдары эсендә лә даими сағыштырыла. Сифат һәм рәүеш, һан һәм сифаттар, ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, төп һәм шартлы сифаттар, бер, ике составлы һөйләмдәр менән тулы, кәм һөйләмдәр, эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр менән теҙмә ҡушма һөйләмдәр һәм уҡыусыларҙың буталыуы мөмкин булған тағы ла бик күп тел күренештәреенең оҡшаш һәм, иң мөһиме, айырмалы яҡтары йәнәш ҡуйып сағыштырыла.

Программала ҡабатлаҡға мөһим урын бирелә. Алдағы кластарҙағы материалдар киләһе кластарҙа, алдағы темалағы материал артабанғы темаларҙа ла ҡабатлана килә. Ҡабатлау тел материалын тоторокло үҙләштереүгә мөмкинлек бирә.

Уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуын арттырыу өсөн, программаға тел тарихына ҡағылышлы мәғлүмәттәр ҙә индерелә. Тарихи йырҙарҙағы, мәҡәлдәрҙәге, ҡобайырҙарҙағы, шулай уҡ ҡушма һүҙҙәрҙәге архаик һүҙҙәрҙең мәғәнәләре, туғанлыҡ терминдары, башҡорт көнитмешенә ҡараған онотола башлаған һүҙҙәр, географик. Биологик атамалар аңлатыла, тәржемә ителә.

Уҡыусыларҙың фекерләү эшмәкәрлеген әүҙемләштереүсе төрлө ҡатмарлыҡтағы эштәргә бик ҙур урын бирелә. Текстың төп фекерен табыу, план төҙөү, йомғаҡлау, дөйөмләштереү, трансформациялау (үҙ исемеңдән һөйләү, диалог итеп үҙгәртеү һ.б.) кеүек эштәр ҙә программаға индерелә.

Уҡылған текстарҙан тел күренештәрен табыу, аңлатыу, сағыштырыу, алмаштырыу эштәре даими планлаштырыла. Текстарға аннотация яҙыу, уларҙың йөкмәткеһе буйынса киносценарий, шиғыр йккмәткеһе буйынса клип сценарийы төҙөү кеүек эштәр һәр класта индерелә.

Уҡытыу рус телендә алып баоылған дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт балаларына туған телде һәм әҙәбиәтте уҡытыу программаһы универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә нигеҙләнә. Был эшмәкәрлек *шәхси универсаль уҡыу* эшмәкәрлеге, *танып белеү* эшмәкәрлеге, *регулятив универсаль уҡыу* эшмәкәрлеге, *коммуникатив универсаль уҡыу* эшмәкәрлеге блоктарына бүленә.

**Шәхси үҫеш эшмәкәрлеге** үҙ аллы белем алыу һәләтен, ижади һәләтте, башҡорт теленең стетик ҡиммәтен аңлауҙы, милли мәҙәниәт күренеше булған туған телдең таҙалығын һаҡлауҙы, үҙ телмәрен камиллаштырырға ынтылыуҙы, һүҙ байлығын арттырыуҙы, үҙеңдең һәм башҡаларҙың телмәрен күҙәтеп, үҙбаһа һәм баһа бирә алыуҙы үҙ эсенә ала.

**Регулятив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге** маҡсат ҡуя алыуҙы, фаразлауҙы, кәрәк урында үҙгәртә алыуҙы, баҙалауҙы, уның һөҙөмтәһендә ыңғай һәм кире яҡтарҙы табыуҙы һ.б. тормошҡа ашыра.

**Танып белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге** проблеманы ҡуйыу һәм сисеү, текстан төп фекерҙе таба, иҫбатлай белеү, трансформациялау, мәғлүмәтте төрлө сығанаҡтан алыу, рефлексия һәләтен үҫтереү һ.б. инә.

**Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге** телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән дә (аудирование, уҡыу, һөйләү, яҙыу) эш итә алыуҙы күҙ уңында тота. Уларға алынған информацияны (уҡытыусының, иптәштәренең һөйләүе, уҡыуы һ.б.) дөрөҫ аңлау, төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙы дөрөҫ уҡый белеү, уларҙы информацион яҡтан эшкәртә белеү (план, тезис төҙөү, һорауҙар ҡуйыу), уҡылған йәки тыңланған тексты төрлө кимәлдә (тулы, ҡыҫҡартып, план формаһында) һөйләй белеү; логик яҡтан төҙөк, эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп үҙ фекереңде яҙа һәм һөйләй белеү, төрлө факттарға, күренештәргә (уҡылған йә күргән) үҙ фекереңде белдерә алыу; ҡуйылған маҡсатҡа ярашлы төрлө йәштәге таныш һәм таныш булмаған кешеләр менән, башҡорт телмәр этикеты нормаларын һаҡлап, һөйләшеүҙәр (интервью, диалогтар) ойоштора алыу, текстарҙа телмәр хаталарын табыу, уларҙы төҙәтеү, текстарҙы камиллаштырыу һәм редакторлау, шиғри стилдән сәсмә стилгә күсерә белеү һ.б. инә.

Рус телендә уҡыған башҡорт балалары башҡорт әҙәбиәтен һәм телен нигеҙҙә бергә өйрәнә. Йәғни уҡылған текстың йөкмәткеһе буйынса ла, тел күренештәре буйынса ла эштәр бер-береһенә бәйле алып барыла. Шуға күрә универсаль уҡыу эшмәкәрлегенең бөтә блоктары ла һәр дәрестә урын ала. Улар текстарға бирелгән һорауҙарҙа һәм эштәрҙә, күнегеүҙәрҙә, информацион, теоретик мәғлүмәттәрҙә даими һәм эҙмә-эҙлекле сағылыш таба.

## Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уқытыу һөҙөмтәләренә талаптар

**Шәхсән һөҙөмтәләр:**

- Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенең башҡорт халҡының иң төп милли-мәҙәни ҡиммәте икәнен аңлау;
- Туған телгә ихтирамлы булыу, уның "бер телдән дә кәм" булмауын аңлау, уны һаҡлау, телмәр мәҙәниәтен камиллаштырырға ынтылыу;
- Башҡот әҙәби әҫәрҙәрен уҡыуға ихтыяж булдырыу,
- Һүҙ байлығы булдырыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләре:**

- Телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен дә үҙләштереү;
- Ишеткән һәм уҡыған мәғлүмәттәрҙең мәғәнәһен дөрөҫ аңлау;
- Төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙы тыңлап, дөрөҫ аңлау;
- Төрлө сығанаҡтарҙан (әҙәбиәт, СМИ, интернет) кәрәкле мәғлүмәттеэҙләп таба алыу, һүҙлектәр, белешмә материалдар менән эшләй белеү;
- Билдәле темаға ярашлы материал эҙләй, таба, системалаштыра белеү, уларҙы анализлай һәм һайлай белеү;
- Йөкмткеһе, стилистик үҙенсәлектәре, тел сараларын ҡулланыуы яғынан төрлө телмәрҙәрҙе сағыштырыу, баһа бирә белеү;
- Уҡылған йә тыңланған тексты төрлө кимәлдә (тулы, ҡыҫҡартып, план формаһында) һөйләй белеү;
- Фекереңде яҙып һәм телдән иркен һәм дөрөҫ әйтә белеү;
- Башҡорт телмәр этикетын һаҡлап,ешеләр менән һәм төрлө шарттарҙа һөйләшеүҙәргә, әңгәмәләргә ҡушыла белеү;
- Телмәреңә (яҙма тексҡа һәм һөйләүгә) баһа бирә алыу, уны төҙәтә, камиллаштыра, редакторлай белеү;
- Аудитория алдында сығыш яһай алыу;
- Башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән алған белемдәрҙе рус теле һәм әҙәбиәте (предмет-ара кимәл) буйынса белемдәр менән сағыштыра, анализлай белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

- Телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле булыуы, телдең мәҙәниәттән айырылғыһыҙ булыуы тураһында төшөнсә алыу;
- Туған әҙәбиәттең башҡорт халҡы тормошондағы урыны, уның башҡа халыҡтар әҙәбиәттәре менән уртаҡлығы һәм үҙенсәлеге тураһында белем алыу;

- Туған тел тураһындағы фәнни мәғлүмәттәрҙе үҙләштереү, уның берәмектәренең һәм кимәлдәренең үҙ-ара бәйләнешен аңлау;
- Башҡорт теленең лексикаһын һәм фразеологияһын, орфоэпик, лексик, грамматик, стилистик нормаларын үҙләштереү;
- Телмәр этикеты нормаларын белеү;
- Тел берәмектәрен, грамматик категорияларҙы таныу һәм анализлай алыу, тел берәмектәрен телмәр ситуацияһында урынлы һәм дөрөҫ ҡулланыу;
- Һүҙгә, һүҙбәйләнешкә, һөйләмгә төрлө типтағы анализ (фонетик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик, синтаксик) яһай белеү;
- Әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе рус әҙәбиәтендәгеләре менән сағыштыра, уларҙың оҡшаш һәм айырмалы, үҙенсәлекле яҡтарын таный ьелеү;
- Әҙәби текстарҙы анализлағанда, туған телдең эстетик функцияһын баһалай белеү.

## 5-9-сы кластар өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәтенең базис уҡыу (белем биреү) планындағы урыны

## Аҙнаһына

Башҡорт теле:
5-се класс – 1 сәғәт,
6-сы класс – 1 с.,
7-се класс – 1 с.,
8-се класс – 1 с.,
9-сы класс – 1 с.
Туған башҡорт әҙәбиәте:
5-се класс – 1с.,
6-сы класс – 1 с.,
7-се класс – 1 с,
8-се класс – 1 с.,
9-сы класс – 1 с.

## Төп йөкмәтке

### 1-се бүлек. **БЕЛЕМ КӨНӨ**

1-СЕ СЕНТЯБРЬ – Белем көнө, уҡытыусы һөнәре тураһында әңгәмәләшеү, шиғырҙар уҡыу, йырҙар тыңлау һәм фильм ҡарау. Яңы уҡыу йылы, тәүге ҡыңғырау тәьҫораттары менән бүлешеү. Йәйге ял тураһында һөйләшеү.

Әҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеләрен үҙләштереү, анализлау. Әҫәр геройҙарына характеристика биреү, текста мөһим урындарҙы билдәләү, әхлаҡи проблемаларҙы һәм тел-композиция үҙенсәлектәрен асыҡлау, план төҙөү, инша темаһы буйынса материалдар туплау. Әҙәби әҫәрҙең жанр үҙенсәлеген аңлатыу һәм икенселәре менән сағыштырыу, текста тел-һүрәтләү сараларын табыу һәм уларҙың ролен асыҡлау, аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатыу, йөкмәткеһен һөйләү, алынған белемдәрҙе дөйөмләштереү һәм системалаштырыу, белем һәм күнекмәләрҙе ныҒытыу, ижади эшмәкәрлекте үҫтереү һәм патриотик тойғо тәрбиәләү. Тасуири уҡыу күнекмәләре биреү, проект эшмәкәрлеге күнекмәләрен ҡулланыу.

### 2-се бүлек. **ТУҒАН ТЕЛ**

Башҡорт теленең төрки телдәр араһында тотҡан урыны, телдең нәфислеге, үҙенсәлеге тураһында фекер аышыу. Туған телдең бөйөклөгөн данлаған сәнғәт әҫәрҙәренә мөрәжәғәт итең. Йырҙар тыңлау, легендалар уҡыу, мәҡәл-әйтемдәр һәм йомаҡтар әйтеү. Интернет селтәренән Халыҡ-ара туған тел көнөнөң билдәләнеүе тураһында мәғлүмәттәр уҡыу.

Башҡорт теле тураһында әҙәби әҫәрҙәрҙең идея-тематик йөкмәткеләрен үҙләштереү, аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлау, һүҙлек байлығын арттырыу, туған тел образына һәм башҡа образдарға характеристика биреү. Туған тел образын һүрәтләү сараларын асыҡлау, композиция, жанр үҙенсәлектәре билдәләү. Туған тел тураһында башҡа милләт шағирҙарының шиғыр һәм башҡа әҫәрҙәрен уҡып фекер алышыу, проект эше башҡарыу.

### 3-сө бүлек. **БАШҠОРТОСТАН**

Башҡортостан тураһындағы әҫәрҙәрҙең идея-тематик йөкмәткеләрен үҙләштереү. Башҡортостан образына тулы характеристика биреү. Төрлө быуын яҙыусыларының тыуған ер һәм Башҡортостанды һүрәтләү алымдарын һәм сараларын күҙәтеү, һығымталар эшләү. Башҡортостандың тарихи үткәне менән таныштырыу, хәҙергеһе һәм киләсәге тураһында фекер алышыу.

Башҡортостан тураһындағы әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнгәндә бай фактик материалдарға таяныу. Башҡортостан картаһы, тарихи мәғлүмәтле китаптар, кинофильмдар, аудиояҙмалар, теле-, радиотапшырыуҙар һ.б. ҡарау, проект эштәре башҡарыу.

Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәрен ҡабатлау. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәренә: тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусыларға, тултырыусы, тура һәм ситләтелгән тултырыусыларға төшөнсә биреү, күнегеүҙәр башҡарыу, текстарҙа аныҡлаусы һәм тултырыусыны табып аңлатыу. Һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу. Телдән һәм яҙма ижади эштәр башҡарыу.

### 4-се бүлек. **ДУҪЛЫҠ**

Дуҫлыҡ, туғанлыҡ, тоғролоҡ тураһындағы әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү һәм дуҫлыҡтың бөйөклөгөн төшөндөрөү. Әҫәрҙәрҙең төп геройҙарына характеристика биреү, тел-һүрәтләү сараларын, әҫәрҙең төҙөлөшөн, жанрын асыҡлау. Төрлө милләт кешеләре, ололар һәм балалар, кешеләр һәм хайуандар араһындағы дуҫлыҡ тураһында әгәмәләшеү, уҡылған текстарҙан, тормоштан дәлилдәр килтереп

иҫбатлау. Дуҫлыҡ, тоғролоҡ тураһында кинофильмдар, спектаклдәр, һынлы сәнғәт әҫәрҙәрен ҡарау һәм фекер алышыу. Йырҙар тыңлау, мәҡәл-әйтемдәр уҡыу, төрлө ижади һәм проект эштәре башҡарыу.

Ниәт, шарт һөйкәлеше ҡылымдарына, ҡылым төркөмсәләренә, исем ҡылымға төшөнсә биреү, күнегеүҙәр башҡарыу. “Синтаксис” темаһы буйынса һорауҙарға яуап биреү.

## 5-се бүлек. **ЙЫЛ МИҘГЕЛДӘРЕ**

Йыл миҙгелдәре тураһындағы әҙәби әҫәрҙәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Әҫәрҙәрҙең темаһын, проблемаларын билдәләү, образдар системаһын анализлау, образдар тыуҙырыу сараларына иғтибар итеү, идеяһын асыҡлау. Текстарҙа ҡыш, яҙ, йәй, көҙ миҙгелдәрен хикәйәләү һәм һүрәтләү алымдарын, сараларын үҙләштереү. Тасуири уҡыу күнекмәләрен камиллаштырыу, аудиояҙмалар тыңлау. Рус яҙыусыларының тәбиғәт, хайуандар тураһындағы әҫәрҙәрен уҡып сағыштырыу, фекер алышыу.

Әҙәби әҫәрҙәргә бәйләп әҙәбиәт теорияһынан белем биреү. Йәнләндереүгә төшөнсә биреү, миҫалдар нигеҙендә нығытыу, төрлө характерҙағы эш һәм күнегеүҙәр башҡарыу. Өйрәнелгән текстарҙан йәнләндереүгә миҫалдар табыу.

Экскурсия ойоштороп, тәбиғәт күренештәрен күҙәтеүҙәргә нигеҙләнеп ижади эштәр башҡарыу. Проектлау алымын ҡулланып төрлө ҡош һәм йәнлектәргә, үҫемлектәргә белешмәләр төҙөргә өйрәтеү.

Текстарға бәйләп көҙгө муллыҡ байрамы, Яңы йыл, һабантуй кеүек байрамдар һәм уңыш йыйыу, ҡар тотоу, иген сәсеү, бесән сабыу кеүек эштәр һәм өмәләр тураһында әңгәмәләшеү. Күренекле рәссамдарҙың һынлы сәнғәт әҫәрҙәре буйынса төрлө характерҙағы ижади эштәр башҡарыу.

Ҡылымдарҙың юҡлыҡ формаларын, һөйләм төҙөлөшөн, ымлыҡтарҙы үҙләштереү. “Һөйләмдең баш киҫәктәре" һәм “Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре” темалары буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Төрлө характерҙағы күнегеүҙәр, эштәр башҡарыу. Өйрәнелгән текстарҙан ҡылымдың юҡлыҡ формаларына, ымлыҡтарға миҫалдар табыу, һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен, төҙөлөшөн тикшереү.

## 6-сы бүлек. **БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ**

Халыҡ ижадының бәләкәй жанрҙарын – мәҡәл, йомаҡтарҙы танып белергә, төрҙәрен билдәләргә, һөйләү һәм яҙма телмәрҙә, тормошта ҡуллана белергә өйрәтеү. Әкиәттәрҙең төрҙәрен үҙенсәлектәренән сығып танырға һәм аралашҡанда әкиәткә хас элементтарҙы ҡуллана белергә өйрәтеү. Әкиәттең художестволы алымдарын, морален һәм композицион өлөштәрен асыҡларға һәм аңларға өйрәтеү. Халыҡ ижадына хас булған терминдарҙы үҙләштереү һәм уҡыу процесында ҡулланыу, һөйләү һәм монологик телмәр күнекмәләренә эйә булыу, танып белеү маҡсатын ҡуя белеү. Информацион эҙләнеү методын ҡулланыу.

Халыҡ хикәйәләре, йыр, таҡмаҡ, ҡобайыр, бәйеттәрҙең төрҙәрен танып белергә, специфик үҙенсәлектәрен асыҡларға, идея-тематик, проблематик йәһәттән анализларға, образдарына характеристика бирергә өйрәтеү. Йыр һәм таҡмаҡтарҙың башҡарылыу үҙенсәлектәрен асыҡлау. Башҡорт йыр сәнғәте, һәм башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар тураһында һөйләшеү, фекер алышыу. Ҡобайыр стиле, көйләп башҡарыу манераһы, сәсәндәр ижадында ҡобайырҙар. Бәйеттең килеп сығыу тарихы, арналыуы һәм һөйләнеү манераһының үҙенсәлектәрен асыҡлау.

## 7-се бүлек. **БОРОНҒО ӘҘӘБИӘТ**

Боронғо уртаҡ төрки ҡомартҡыларҙы, шәжәрәләрҙе, сәсәндәр ижадын, боронғо әҙәбиәт үрнәктәрен: Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла ижадтарын өйрәнеү. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, образдарын, идеяһын асыу. Һүҙлек байлығын арттырыу. Шәжәрә

ағасын ҡарау, өйрәнеү һәм үҙ ырыуың шәжәрәһе ағасын төҙөү. Сәсәндәр әйтешен аудиояҙманан тыңлау һәм фекер алышыу. Салауат Юлаев, Аҡмулла тураһында тарихи документтар, фильмдар, спектаклдәр ҡарау, фекер алышыу. Уларға ҡуйылған һәйкәлдәр тураһында мәғлүмәт биреү. С.Юлаев һәйкәленең авторы С.Тавасиев тураһында һөйләшеү.

Әҙәбиәт теорияһынан ҡиссаға, архаизм, варваризм, неологизмдарға төшөнсә биреү.

Алмаш төркөмсәләренә төшөнсә биреү. Ҡылым, синтаксиси, һүҙ һәм һөйләм темаларын ҡабатлау. Бер составлы, йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәр, хәлдәр, һөйләм киҫәктәрен бер-береһенән айырыу темаларын үҙләштереү. Күнегеүҙәр, ижади эштәр башҡарыу.

## 8-се бүлек. САЛАУАТ БАТЫР

Салауат Юлаевтың биографияһы менән ентекле танышыу, унын етәкселегендәге ихтилал тураһында тарихи белешмә биреү. Юлай Аҙналин һәм Салауат Юлаевтың Рогервик ҡалғаһендә тотҡонда булыуы тураһындағы тарихи мәғлүмәт һәм документтарҙы уҡыу, өйрәнеү һәм әңгәмәләшеү. Әҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеләрен үҙләштереү, идеяларын асыҡлау, С.Юлаев образые һүрәтләү саралары аша тикшереү һәм башҡа әҫәрҙәрҙеке менән сағыштырыу.

Ю.Аҙналин һәм С.Юлаев тураһында тарихи-документаль һәм художестволы кинофильмдар, спектаклдәр ҡарау, йырҙар тыңлау һәм фекер алышыу.

“Салауат Юлаев фольклорҙа, әҙәбиәттә, сәнғәттә” тигән темаға төрлө характерҙағы ижади һәм проект эштәре башҡарыу, саралар ойоштороу.

Һөйләм киҫәктәрен бер-береһенән айырыу осраҡтарына төшөнсә биреү. Күнегеүҙәр, ижади эштәр, биремдәр башҡарыу.

## 9-сы бүлек. ҠАТЫН-ҠЫҘ ЯҘМЫШЫ

Әҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һүҙлек байлығын арттырыу, төп идеяны асыҡлау, Әсә образына тулы характеристика биреү, әсәйҙең ғаиләләге, йәмғиәттәге урынын баһалау. Хәҙерге йәмғиәттәге ата-әсәләр һәм балалар проблемаһы тураһында фекер алышыу, һығымталар яһау. Әсәйҙәр тураһында йырҙар тыңлау, мәҡәл-әйтемдәр уҡыу һәм тормош менән бәйләп мәғәнәләрен аңлатыу. Әсә образына бағышланған сәнғәт әҫәрҙәрен ҡарау, әңгәмәләшеү һәм төрлө характерҙағы ижади һәм проект эштәре башҡарыу. Әсәлек хоҡуҡтарын яҡлаусы һәм һаҡлаусы закондарҙы өйрәнеү. Ғаилә, әсә һәм унын тормошо, яҙмышы тураһындағы спектаклдәр, кинофильмдар ҡарау һәм фекер алышыу ойоштороу.

Ике һәм бер составлы һөйләмдәргә төшөнсә биреү.

Бер составлы һөйләмдәр, билдәле эйәле һөйләм, дөйөм эйәле һөйләм, билдәһеҙ эйәле һөйләм, эйәһеҙ һөйләм, атама һөйләм, тулы һәм кәм һөйләмдәрҙең грамматик үҙенсәлектәрен асыҡлау. Теоретик белемдәрҙе күнегеүҙәр, эштәр башҡарып нығытыу. “Ике һәм бер составлы һөйләмдәр” темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

## 10-сы бүлек. МӘҢГЕЛЕК УТ

Еңеү көнө тураһында әңгәмәләшеү. Бөйөк Ватан һуғышы тураһында тарихи белешмә биреү. Георгий таҫмаһы, Исемһеҙ һалдат һәйкәле тураһында фекер алышыу. Һуғыш темаһына һәм Еңеү көнөнә арналған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, образдар системаһын анализлау. Яугир һалдат образын һүрәтләү сараларын һәм алымдарын асыҡлау. Әҫәрҙәрҙең поэтикаһы өҫтөндә эш. Тасуири уҡыу күнекмәләре биреү. Патриотик рух тәрбиәләү. Һуғыш темаһына арналған тарихи-документаль, нәфис кинофильмдар, спектаклдәр ҡарау. Еңеү парадындағы “Үлемһеҙ полк” тураһында әңгәмә ойоштороу. Һуғыш үткән урындар буйлап ситтән тороп сәйәхәт итеү. Һуғыш темаһына һәм Еңеү көнөнә арналған йырҙар тыңлау, проект эштәре эшләү.

Башҡорт телендә юҡлыкты беледереү категорияһына төшөнсә биреү. Күнегеүҙәр башҡарыу.

### 11-се бүлек. **ТАРИХ**

Башҡорт халҡының данлы тарихын сағылдырған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, проблемаларын, идеяһын асыу. Боронғо хәрби хеҙмәткә ҡағылышлы терминдар менән һүҙлек запасын тулыландырыу. Образдарға характеристика биреү. Ата-бабаларҙың азатлыҡ яулап, илен һаҡлап яу сабыуы тураһында әңгәмәләшеү. Әҫәрҙәрҙең композицион үҙенсәлектәрен, тел-һүрәтләү сараларын асыҡлау. Тарихи документтар, тарихи кинофильмдар ҡарап, тарихи шәхестәр, ихтилал башлыҡтары, башҡорт полководецтары тураһында мәғлүмәттәр биреү. Музейҙарға экскурсия ойоштороу йәки интернет селтәре аша милли музейға сәйәхәт итеү. Һынлы, музыка, йыр сәнғәте әҫәрҙәрен ҡулланыу.

Әҙәбиәт теорияһынан хитап, повесть, роман тураһында төшөнсә биреү.

Исемгә, уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәргә төшөнсә биреү. Исемдәрҙең һан һәм зат менән үҙгәреүен, яһалышын, килеш менән үҙгәреүен үҙләштереү. Ҡушма һөйләм синтаксисын, теҙмә ҡушма һөйләмде, теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе үҙләштереү. Күнегеүҙәр, ижади проект эштәре башҡарыу.

### 12-се бүлек. **БАШҠОРТ МИЛЛИ АШТАРЫ, ЙОЛАЛАРЫ, БАЙРАМДАРЫ**

Башҡорт халҡының йолалары һәм милли аштары тураһындағы әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, идеяларын асыу. Һүҙ байлығын арттырыу, образдар системаһын анализлау. Ижади һәм проект эштәре башҡарыу. Халыҡ хәтерендә һаҡланып, быуындан быуынға күсә килгән йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу һәм улар тураһында әңгәмә ҡороу.

Башҡорт халҡының милли аштары менән таныштырыу. Уларҙы әҙерләү буйынса белешмәләр төҙөү.

Башҡорт халҡының йолалары һәм милли аштары тураһында видеояҙмалар, кинофильмдар ҡарау һәм әҙәби әҫәрҙәрҙә тасуирланғаны менән сағыштырыу.

Күренекле шәхестәрҙең: А.П.Чеховтың, Л.Н.Толстойҙың һ.б. Башҡортостанда ҡымыҙ менән дауаланыуҙары тураһында әңгәмәләшеү, проект эше башҡарыу.

“Теҙмә ҡушма һөйләм” темаһы буйынса эштәр башҡарыу һәм һорауҙарға яуаптар биреү. Эйәртеүле ҡушма һөйләмгә төшөнсә биреү, грамматик функцияларын үҙләштереү. Күнегеүҙәр, ижади эштәр башҡарыу.

### 13-сө бүлек. **ӘҘӘП, ӘХЛАҠ**

Әҙәп, әхлаҡ темаларын сағылдырған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Һүҙ байлығын арттырыу. Йөкмәткене анализлау, ыңғай геройҙарҙың характерҙары миҫалында уҡыусыларҙа яҡшы сифаттар тәрбиәләү. Тәртип, әҙәп, иман тураһында фильмдар ҡарау, фекер алышыу, диспут үткәреү, проект эштәре эшләү.

Һөйләмдә эйәрсән киҫәктәрҙең айырымланыуына төшөнсә биреү, күнегеүҙәр башҡарыу.

### 14-се бүлек. **БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ХАЛЫҠ ШАҒИРҘАРЫ ҺӘМ ЯҘЫУСЫЛАРЫ**

Башҡортостандың халыҡ шағирҙары һәм яҙыусыларының тормош һәм ижад юлы менән танышыу. Улар тураһында теле, -радиотапшырыуҙар, документаль фильмдар ҡарау, ғалимдар яҙған ижади портреттарын үҙләштереү, йөкмәткеләрен анализлау, тема, идеяларын асыҡлау, образдарын характерлау. Шағир һәм яҙыусыларҙың исемдәрен мәңгеләштереү: уларға бағышланған музейҙар, һынлы сәнғәт әҫәрҙәре һ.б. тураһында мәғлүмәт биреү, проект эштәре эшләү.

һан төркөмсәләренә һәм һандарҙың үҙгәрешенә төшөнсә биреү, күнегеүҙәр, ижади эштәр башҡарыу.

15-се бүлек. **СӘНҒӘТ**

Ҡурай тураһындағы әҙәби әҫәрҙәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Ҡурай образына характеристика биреү. Ҡурай тураһында легендалар тыңлау. Республикабыҙҙа киң билдәле булған мәшһүр ҡурайсыларҙың тормошо һәм ижады менән таныштырыу. Йомабай Иҫәнбаев, И.Дилмөхәмәтов, А.Айытҡолов башҡорыуында ҡурай моңо тыңлау. Улар тураһында тарихи документтар, кинофильмдар, фотоһүрәттәр ҡарау. Сәнғәт оҫталарының ҡурай мәктәбе тураһында фекер алышыу. Сәнғәт оҫталарына һәм уларҙың ижадтарына бағышланған конкурстар тураһында фекер алышыу. Сәнғәт оҫталарының музейҙары буйлап ситтән тороп сәйәхәт итеү, ижади эштәр башҡарыу.

Әҙәбиәт ғилеме тураһында төшөнсәне үҙләштереү. К.Әхмәтйәнов, Ғ.Хөсәйеновтың хеҙмәттәренән әҙәбиәт ғилеме тураһындағы билдәләмәне уҡыу, проект эше эшләү.

Эйәрсән һөйләм төрҙәренә төшөнсә биреү. Һәр төрөн практик үҙләштереү өсөн күнегеүҙәр, эштәр башҡарыу.

16-сы бүлек. **ӨФӨ**

Баш ҡала – Өфө тураһында тарихи белешмә биреү. Ҡаланың архитектураһы, мәҙәни усаҡтары, халҡы, иҫтәлекле урындары тураһында мәғлүмәт биреү. Өфө тураһында тарихи-документаль фильмдар ҡарау, уға бағышланған йырҙарҙы, легендаларҙы һ.б. үҙләштереү, проект эше эшләү.

Төп һәм шартлы сифаттарға төшөнсә биреү һәм күнегеүҙәр башҡарыу.

**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты:**


1. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А. «Примерные образовательные программы по предмету “Родной (башкирский язык и литература) для 5-11 классов общеобразовательных организаций с русским языком обучения» –Уфа: «Китап», 2017
2. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А., Карабаев М.И., Аминева З.Р. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -5».- Уфа: «Китап», 2017;
3. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А., Карабаев М.И., Аминева З.Р. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -6».- Уфа: «Китап», 2017;
4. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А., Карабаев М.И., Аминева З.Р. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -7».- Уфа: «Китап», 2017;
5. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А., Карабаев М.И., Аминева З.Р. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -8».- Уфа: «Китап», 2017;
6. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А., Карабаев М.И., Аминева З.Р. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -9».- Уфа: «Китап», 2017;
7. Хажин В.И., Аккужина Ф.А. “Методическое руководство к учебнику «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте» для 5-9 классах общеобразовательных организаций с русским языком обучения»–Уфа: «Китап», 2017
8. Толомбаев Х.А,Атнағолова С.В. Диктанттар йыйынтығы: башҡорт теленең 5-9 –сы класс уҡыусылары өсөн ҡулланма. - Өфө,Китап, 2009
9. Искужина Ф.С., Вәлиева Г.Д. Башҡорт телендә текст теорияһы һәм методикаһы. -Өфө: Китап,2011

### V-IX класс уҡыусыларының башҡорт теле буйынса белемдәрен, белеүҙәрен (умение) һәм күнекмәләрен баһалау нормалары

#### I.Телдән биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, уҡыусыларҙан яуап алыу,уларҙың башҡорт теле буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен тикшереү, иҫәпкә алыу, шуның менән бергә,алған белемдәргә таянып, тел берәмектәренә, күренештәренә аңлатма бирергә өйрәтеү алымдарының береһе иҫәпләнә.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, түбәндәге критерийҙар менән эш ителергә тейеш:

1. Яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;
2. Үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;
3. Яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыусының телдән биргән яуабы үтелгән материалдың уҡытыусы тәҡдим иткән өлөшөнә логик эҙмә-эҙлекле аңлатманы эсенә алған бәйләнешле телмәр булырға, яуап биреүсе баланың өйрәнелгән ҡағиҙәләргә,билдәләмәләргә таянып эш итә белеүен күрһәтергә тейеш.

Әгәр уҡыусы:

1) Тәҡдим ителгән теманы тулы аңлатһа, тел төшөнсәләренә дөрөҫ билдәләмә бирһә;
2) Үтелгән материалды тулы аңлауын, белемдәрен практик ҡуллана белеүен күрһәтһә;
3) Материалды эҙмә-эҙлекле һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы аңлатһа, уның яуабы **«5»** билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы «5» билдәһен ҡуйыу талаптарына ярашлы яуап бирһә, ләкин һирәк яһала торған хаталар ебәреп тә уҡытыусы иҫкәртеүенән һуң уларҙы төҙәтеп барһа, телендә, телмәр төҙөлөшөндә һирәк-һаяҡ яңылышлыҡтар китһә, уның яуабы **«4»** билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы тәҡдим ителгән темаға ҡараған төп төшөнсәләрҙе аңлауын һәм белеүен күрһәтһә, ләкин

1) Материалды тулы аңлата алмаһа, төшөнсәләрҙең һәм ҡағиҙәләрҙең билдәләмәһендә хаталар ебәрһә;
2) Әйткән фекерҙәрен тулы һәм иҫбатлауҙы нигеҙләй белмәһә, үҙ миҫалдарын килтерә алмаһа;
3) Яуабында эҙмә-эҙлелек һаҡланмаһа, телмәр төҙөлөшөндә хаталар булһа, уның яуабы **«3»** билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы һоралған материалдың күберәк өлөшөн белмәүен,билдәләмәләрҙе һәм ҡағиҙәләрҙе әйткәндә уларҙың төп фекерен боҙоуға килтерә торған хаталар ебәрһә, материалды икеләнеүҙәр менән системаһыҙ аңлатһа, уның яуабы **«2»** билдәһе менән баһалана.

#### II. Диктанттарҙы баһалау

Уҡытыусы башта текстыуҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим итеирергә тейеш.

**Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай**:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;

2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;

3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;

4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Быңдай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

**Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә**:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

**Диктант бер генә билдә менән баһалана**.

**«5» билдәһе** — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

**«4» билдәһе** 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«3» билдәһе** 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«2» билдәһе** 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

**«2» билдәһе** бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**III. Иншаларҙы һәм изложениеларҙы баһалау**

Рус мәктәптәрендә 9-сы класта башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән изложениелар һәм иншалар яҙҙырыу өсөн һайланған текстың күләме түбәндәгесә:

| | |
|---|---|
| Изложение | 80-90 |
| диктант | 85-95 |

Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың:

1) теманы аса белеүе, тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы һайлай белеүе,
2) яҙғанда, грамматик нормаларҙа һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла, изложениеға ла һәр ваҡыт ике билд ҡуйыла. Беренсе билдә менән уларҙың йөкмәткеһе һәм телмәр төҙөлөшө, икенсе билдә менән грамоталылыҙ кимәле баһалана.

| **Баһаларҙың төп критерийҙары** | | |
|---|---|---|
| Йөкмәтке һәм телмәр төҙөлөшө | Грамоталылыҡ | Баһалау |
| 1.Яҙма эштең йөкмәткеһе тулыһынса темаға тура килһә,<br>2. Фактик хата булмаһа,<br>3.Йөкмәтке эҙмә-эҙлекле бирелһә (план буйынса йәки планһыҙ),<br>4. Эш лексик яҡтан бай булыуы менән айырылып торһа,<br>5.Эш темаға һәм төп фекерҙе аңлатыу маҡсатына ярашлы стилдә яҙылһа, телмәре тасуири булһа,<br>Иҫкәрмә. Бер генә телмәр хатаһы һәм бер генә йөкмәтке хатаһы булған яҙма эшкә «5» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә 1 орфографик, йәки 1 пунктуацион, йәки 1 грамматик хата (тимәк, бөтәһе 1 генә хата) булһа, | **«5»** билдәһе ҡуйыла |
| 1. Эште йөкмәткеһе,нигеҙҙә,темға тура килһә (теманан ситкә китеү бик аҙ булһа),<br>2. Йөкмәтке дөрөҫ бирелһә,әммә эштә бик аҙ булһа ла фактик хаталар осраһа,<br>3. Төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклегендә тупаҫ булмаған етешһеҙлектәр генә булһа,<br>4. Яҙма эш, нигеҙҙә, синоним һүҙҙәргә һәм синонимик грамматик формаларға бай булһа,<br>5. Эш бер төрлө стилдә яҙылыуы һәм тасуири булыу менән айырылып торһа,<br>Иҫкәрмә. Яҙма эштең телмәр хаталары өстән дә, йөкмәткеһендәге хаталар икенән дә артмаһа,уға «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә 2 орф. һәм 2 пункт. хата, йәки 1 орфогр. һәм 3 пункт. хата булһа, йәки бер орфогр хатаһы ла булмайынса, пункт. хаталары 4-тән, һәм грамматик хаталары 2-нән артмаһа, | **«4»** билдәһе ҡуйыла |

| | | |
|---|---|---|
| 1. Яҙма эштә теманан ситкә китеүгә ҡараған етди хаталар булһа,<br>2. Төп фекер дөрөҫ аңлатылһа,әммә эштә фактик хаталар ебәрелгән булһа,<br>3. Айырым өлөштәрендә төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа,<br>4. Яҙма эш бер төрлөрәк типтағы синтаксик конструкцияларҙан торһа, һүҙлеге ярлы, һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙа хаталар булһа,<br>5. Эш тема һәм уны алатыу (асыу)талап иткән бер төрлө стилдә яҙылмаһа,<br>Иҫкәрмә. Яҙма эштәге телмәр хаталары 5-тән, йөкмәткеләге хаталар 4-тән артмаған хәлдә лә, эшкә **«3»** билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә **4** орф. һәм **4** пункт хата, йәки 3 орф. һәм 5 пункт. хата, йәки 7 пункт. хата һәм орфогр. хатаһыҙ булһа, шулар өҫтөнә 4 грамматик хата ебәрелһә, | **«3»** билдәһе ҙуйыла |
| 1. Яҙма эш темаға тура килмәһә,<br>2. Фактик хаталар күп булһа,<br>3. Эштең бөтә өлөштәрендә фекер аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа, текст өлөштәре араһында бәйләнеш булмаһа,планға ярашһыҙ булһа,<br>4. һүҙлеге әҙәбиәттән тыш ярлы булһа, эш үҙ-ара бәйләнеше булмаған бер төрлө конструкциялы ҡыҫка һөйләмдәрҙән торһа, һүҙҙәр ҡулланышында ла хаталар осраһа,<br>5. Эштә стилдең бер төрлөлөгөнә ирешелмәгән булһа,<br>Иҫкәрмә. Яҙма эштәге телмәр хаталары 7-нән, йөкмәткеһендәге хаталар һаны 6-нан артмаған хәлдә лә, уға «2» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Орф. хаталары 7-нән, пункт. хаталары 7-нән, грамматик хаталар ҙа 7-нән артһа, | **«2»** билдәһе ҡуйыла |